Юлыҡ ауылының тамғалары.

Ғайса Хөсәйенов «Башҡорт тамғалары, тамғалы яҙыуҙар, балбалдар китабында» һүрәтләүе буйынса «Башҡорттар борон-борондан әйберҙәргә, ағасҡа, ташка тамға һалыр булған. Ул ниндәйҙер бер мәғәнәгә эйә йолаға, уҙенсә бер ҡанунға әйләнеп киткән. Уның мәғлүм бер тәгәйенләнеше, айышы билдәләнгән. Бер боронғо айышы ҡәуем, ҡәбилә булһа, аҙағырак ырыу билдәһе рәүешен алған, буғай. Төрки угыҙ хикәйәттәрендә Уғыҙ ҡағандың бер төркөм ҡәуемдәргә тамға, ағас, ҡош, оран исемдәрен билдә итеп тәгәйенләп биргәнлеге сағыла. Боронғо башҡорттар ҙа Уғыҙ каған (хан) ҡулынан изге тамға, ағас, ҡош, оранга эйә булған, тиелә. Риуәйәттәр, тәуарихтар һөйләүенсә, был йоланы Сыңғыҙ хан да дауам итеп, башҡорт ырыу башлыктарына һәр береһенә тәгәйенләп тамға, ағас, ҡош, оран атап биргән. Йәғни был атамалар һәр ҡәуем, ырыуҙың атрибутына әүерелгән. ҡош тәпәйен йәки ниндәйҙер һынды хәтерләткән тамғаларға мәжусилек замандарынан ҡалған, изге мәғәнәләр ҙә һалынган булһа кәрәк. Тамға ырыу эмблемаһы функцияһын утәгән. Ырыу башлығы өсөн тамғаһы дәрәжә билдәһе байса булған.

XVIII—XIX быуаттарҙа башҡорттарҙа ырыуҙарҙың тарихи, социаль роле кәмей йәки тартҡала бара, ырыу тамғалары ла тарауланып, уҙ нәҫел, ғаилә даирәһенәсә тарайта. Тимәк, башҡорт тамғалары хосуси милекселекте адлаткан тарыраҡ мәғәнәгә кусә. XIX быуаттыд икенсе яртыһынан, тәғәйен 60-сы йылдарынан тамғалар нәҫел, ғаилә милкен курһәтеп, ер-һыу биләмәләренә, малдарға, ҡаралтыларға, ҡорамалдарға, әйберҙәргә һәм башҡа милектәргә һалынган. Тамғалар быуындан-быуынға күсеп килгән, улар нәҫелдең туғанлыҡ билдәһе булып киткән.

Ырыу, ырыу-ара килешеу ҡағыҙҙарына һәм башҡа документтарға ырыу, нәҫел-ғаилә тамғалары ла һалынган. Ҡул ҡуйыусы старшина, староста йәки ғаилә башлығы тамғаһын һалған тәҡдирҙә лә, ғәҙәттә, «тамгамды һалдым» тип яҙып та ҡуйған. «Ҡул ҡуйҙым», «тамға һалдым», тигән һүҙ яҙмала һәм лексиконда шулай нығынған. Тимәк, бындай саҡта тамға мөһөр билдәһе урынына ла йөрөгән.

Юлыҡ ауылының нәсел тамғалары Башҡортостандың үҙәк дәүләт архивындағы метрика кенәгәләрендә табылды.

1829 йыдан башлап мәхәллә имамдары тыуыу, үлеү, никахлашу һәм айырылышуларҙы метрика кенәгәһенә теркәп бара башлайҙар. Метрика кенәгәләрен билгеле бер үрнәк буйынса муллалар (Урыҫ телен белмәһәләр) ғәрәп графикаһында татар (ҡайһы йылдарҙа фарсы) телендә тултырып барғандар. Кенәгә ике нөсхәлә тултырылған. Муллалар метрика кенәгәләренең бер нөсхәһен үҙҙәрендә ҡалдырып, икенсе нөсхәһе Диния назараты архивына тапшырыла. Муллалар ул дәүерҙә бөгөнгө ЗАГС функцияһын үтәгән.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Октябрь борылышыннан һуң мәсеттәр туҙҙырылған, уларҙың бик аҙы ғына иҫән ҡала. Ололарҙың берәүҙәре һөйләүенсә масеттәге ҡағыҙҙарҙы Ҡасимов Шәриф урамында йәшереп күмгән тиһәләр, икенселре һөйләүенсә Рашитов Һәҙиәтулла тарихи документтарҙы нимә эшләтергә белмайенса яндырған тип быуындан быуынға һөйләнә.

Ауыл мәхәлләһенең 1835-1899 йылдарҙа төҙөлгән метрика кенәгәләре өйрәнелде. Урманшин Азамат Рашитович ул документтарҙы архивтан табып, ғәрәп яҙыуҙарын руссаға тәржемә итте. Артабан Юлмухаметов Һаҙый нәҫелдәр буйынса тамғаларҙы системаға һалды.

| Фамилиялар (ара) | Тамғалары | |
|---|---|---|
| Юлуковтар, Шафиковтар (Дини араһы) |  | |
| Каримовтар (Түмәк араһы) |  | |
| Давлетбаевтар (мәтәес араһы) |  | |
| Юлбарисовтар |  | |
| Якуповтар |  | |
| Зайнуллиндар |  | |

| | | |
|---|---|---|
| Күҫәк араһы: | | |
| Сафаргуловтар |  | |
| Масковтар, Зайнетдиновтар |  | |
| Мухутдиновтар, Маматкуловтар |  | |
| Киньягуловтар |  | |
| Хисматовтар, Юлуковтар |  | |
| Муратовтар |  | |
| Рашитовтар, Насыровтар, Халиловтар. Саттаровтар |  | |
| Валиевтар, Шагиевтар, |  | |
| Азнагуловтар |  | |
| Кудайгуловы |  | |
| Абдульмановтар, Урманшиндар |  | |
| Якшыбаевтар |  | |
| Юлмухаметовтар (ябалаҡ) |  | |
| Кужиндар |  | |
| Абдрахмановтар |  | |
| Исиргаковтар |  | |
| | | |

Таблицанан күренеүенсә купселек нәҫелдәрҙең тамғаһы  йәки  тамғаһының дауамы. Был тамғаны Юлыктың төп тамғаһы булған тип фаразларға мөмкин.

Юлуков Рахимьян.